**_Ҡаһарманлыҡ тураһында афоризмдар_**

*Үҙең өсөн генә йәшәү — хурлыҡ.*

*Н. А. Островский*

* * *

*Бер нәмәнән дә ҡурҡмаусы һәм хаҡлыҡ менән йәшәүсе һәр кеше үҙ Ватанының абруйын күтәрә.*

*Р. Роллан*

* * *

*Ысын батырлыҡ бәлә килгәндә асыла.*

*Ф. Вольтер*

* * *

*Ҡаһарманлыҡ башҡа төр яҡшы сифаттар үсеше өсөн кәрәк. Тәүәккәл булмайынса хаҡлыҡты табыу ҙа, мөхәббәтте һаҡлау ҙа мөмкин түгел.*

*М. Ганди*

* * *

*Әйбер юғалтһаң — эҙҙе юғалтырһың, намыҫыңды юғалтһаң — күпте юғалтырһың, тәүәккәллегеңде юғалтһаң — бөтәһен дә юғалтырһың.*

*И. Гете*

* * *

*Ватанға мөхәббәт — абстракт төшөнсә түгел, ойошторoоуҙы, үҫтереүҙе, мәҙәниәтлелекте талап иткән реаль рух көсө.*

*А. Н. Толстой*

* * *

*Патриот — Ватанға хеҙмәт итеүсе, ә Ватан — иң әүәл халыҡ ул.*

*Н. Г. Чернышевский*

* * *

*Үҙ-үҙен хөкөм итергә өйрәнмәгән кеше башҡаларҙы ғәйепләй алмай.*

*И. Гете*

* * *

*Үҙен кеше буларак өйрәнмәүсе бүтәндәрҙе бер ваҡытта ла яҡшы белә алмаясаҡ.*

*Н. Г. Чернышевский*

* * *

*Идеал — юл күрһәтеүсе йондоҙ. Унһыҙ аныҡ йүнәлеш юҡ, йүнәлешһеҙ тормош юҡ.*

*Л. Н.Толстой*

* * *

*Һәр кем — үҙ бәхетен тыуҙырыусы.*

*Р. Стил*

* * *

*Бәхет башкалар менән бүлешкәндә арта ғына.*

*Ж. Ламери*

* * *

*Башкалар бәхетенән тыш шәхси бәхеттең булыуы мөмкин түгел.*

*Н.Г.Чернышевский*

* * *

*Иң гүзәл һәм иң бәхетле кешеләр — ғүмер буйына башкалар бәхетен хәстәрләүселәр.*

*В. А. Сухомлинский*

***Хеҙмәт тураһында афоризмдар***



*Кешенең сиктән тыш бәхете — һәр вакыт яраткан эшендә булыуы.*

*В. И. Немирович -Данченко*

* * *

*Мәҙәниәте юғары булған һайын хеҙмәт юғары баһалана.*

*В. Рошер*

* * *

*Яратып эшләгән кеше һәр төрлө хеҙмәтте лә шиғриәтле итә.*

*Н. Г. Чернышевский*

* * *

*Кеше хеҙмәт ярҙамында камиллаша.*

*В. Г. Белинский*

* * *

*Хеҙмәт кешелә ижади көс уята.*

*А. Н. Т о л с т о й*

* * *

*Үҙ эшеңде үҙең хәстәрлә: эшең һине мәжбүр итмәһен.*

*Б. Франклин*

* * *

*Кешенең бөтә нәмәһе лә: йөҙө лә, кейеме лә, күңеле лә, уйҙары ла матур булырга тейеш.*

*А. П. Чехов*

* * *

*Кешенең холко — уның күңел көҙгөһө.*

*И. Гете*

* * *

*Уйланмаған эшкә тәүәккәл булма, уйланғандан һуң тәүәккәл бул.*

*Л. Н. Толстой*

* * *

*Кеше ҡылығын тикшергәндә тәүҙә үҙеңдекен баһала.*

*Л. Н. Толстой*

* * *

*Башҡаларҙа нимәне хупламайһың, шуларҙың үҙеңдә булыуынан һаҡлан.*

*Катон Старший*

## *Ғәҙеллек тураһында афоризмдар*



*Мәғәнәһеҙлеккә, буш һүҙлелеккә нәфрәт менән ҡара. Бөтә уйлағаның һәм эшләгәнең изгелек, ғәҙеллек тантанаһы өсөн булһын.*

*В. А. Сухомлинский*

* * *

*Уйҙағы хаталар һүҙҙәрҙәге хатаны, һүҙҙәрҙәге хаталар эштәге хаталарҙы барлыҡҡа килтерә.*

*Д. И. Писарев*

* * *

*Йөрәктән сыҡҡан һүҙ йөрәккә инә.*

*Низами*

* * *

*Нимәне булһа ла, башҡаларға әйткәнсе, тәүҙә үҙеңә әйтеп ҡара.*

*Сенека*

* * *

*Ҡыҫҡа телмәр һәр саҡ йөкмәткеле була һәм көслө тәьҫир ҡалдыра.*

*М. Горький*

* * *

*Аҡыллының теле — йөрәгендә, аҡылһыҙҙың йөрәге — телендә.*

*П. В. Шелгунов*

* * *

*Бары өҫтән-мөҫтән булған белем һәм ышаныс һыҙ уйланыуҙар ғына самаһыҙ лығырҙауҙарға килтерә.*

*Б. Гальдос*

* * *

*Дөрөҫлөктөң теле ябай.*

*Сенека*

* * *

*Ғәҙел эш — дөрөҫ башкарылғанға күрә какшамаҫлык.*

*Плутарх*

* * *

*Дөрөҫлөктө әсе булһа ла тыңла.*

*Кабус*

***

*Дөрөҫлөк — йәшәү өсөн икмәк кеүек үк иң кәҙерле нәмә.*

*Л. Берне*

* * *

*Дөрөҫлөк — кешелә намыҫтың еңеүе ул.*

*М. М. Пришвин*

* * *

*Ғәҙеллек — йәшәү һулышы, һәр төрлө булдыклылык нигеҙе.* .

*Т. Драйзер*

* * *

*Тормошто яратыу — дөрөҫлөктө яратыу.*

*Ф. Кент*

* * *

*Дөрөҫлөк — йәшәү һулышы, кешелек сифаттары нигеҙе.*

*Т. Драйзер*

* * *

*Йоҡоң килһә лә, үткән көндәге ҡылыҡтарыңа баһа биреп бөтмәйенсә, күҙеңде йомма.*

*Пифагор*

* * *

*Үҙеңә ышаныу — бөйөк башланғыстарҙың иң тәүге мотлаҡ шарты.*

*С. Джонсон*

* * *

*Талант — үҙеңә, үҙ көсөңә ышаныу ул.*

*М. Горький*

* * *

*Тормошта иң файҙалыһы — үҙ тәжрибәң.*

* * *

*Аң ихтыярға юл яктырта, ә ихтыяр эшкә ҡуша.*

*Я. Коменский*

* * *

*Аң — тойғоно якшырта.*

*Р. Роллан*

* * *

*Үҙеңә-үҙең хужа булыу — иң юғары хакимлык, үҙ нәфсеңдең ҡоло булыу — иң һәләкәтле ҡоллоҡ.*

*Сенека*

* * *

*Тормошта иң беренсеһе һәм иң мөһиме — үҙеңә баш булырға тырышыу.*

*В. Гумбольдт*

* * *

*Үҙенә баш була белгән кеше генә ирекле.*

*Ф. Ш иллер*

* * *

*Үҙ-үҙен еңеүсенән дә көслө кеше юҡ.*

*П. Бигер*

* * *

*Ҡаһарманлыҡ ҡул көсөндә йәки ҡылыс менән эш итә белеүҙә генә түгел, ә бәлки, үҙ-үҙеңә идара итә һәм ғәҙел була белеүҙә лә.*

*Саади*

**Белем тураһында афоризмдар**



*Һәр саҡ уҡырға, бөтәһен дә белергә! Күп белгән һайын көслөрәк була бараһың.*

*М. Горький*

* * *

*Уҡыу һәм фекерләү аң үҫеше сығанаҡтарының иң мөһиме.*

*В. А. Сухомлинский*

* * *

*Уҡыуҙан туҡталған кешеләрҙә фекерләү үҫеше лә туҡтай.*

*А . Дидро*

* * *

*Барыһын да уҡыу бөтөнләй кәрәкмәй, тик үҙеңдең күңелеңдәге һорауҙарға яуап биргәнде генә уҡырға кәрәк.*

*Л. Н. Толстой*

* * *

*Китапты һайлап ала белеү менән бергә, ундағы аңыңды үҫтерерҙәй нәмәләрҙе генә һайлап уҡырға ла өйрәнергә кәрәк.*

*С. И. Танеев*

* * *

*Уҡыу — уҡығаныңды тормошта файҙаланырға тейешһең тигән һүҙ ул.*

*А. Дистервег*

* * *

*Белем алғанда үҙегеҙҙе билдәле бер эҙмә-эҙлеклелеккә өйрәтегеҙ. Бер ваҡытта ла, «инде бөтәһен дә беләм» тип уйламағыҙ, киреһенсә, һәр*

*ваҡыт «мин наҙанмын» тип әйтерлек көҙрәт табығыҙ. Үҙегеҙҙе тәкәбберлек яулауына ирек бирмәгеҙ, ул һеҙҙе килешәһе урында киреләндерәсәк, Ул һеҙҙе файҙалы кәңәштән һәм дуҫтарса ярҙамдан баш тарттырасаҡ, ул һеҙҙең объектив була белеү үлсәүен юғалтасаҡ.*

*И. П. Павлов*

* * *

*Йәшәү — ул хеҙмәт, хеҙмәт — көрәш, көрәшһеҙ бер нәмә лә яуланмай, ә яулағаның булмаһа — һиңә ихтирам да юҡ.*

*В. Белинский*

* * *

*Бөгөнгө йәшәү — иртәгәһе еңеүгә хеҙмәт итеү ул.*

*Н. Островский*

* * *

*Көслө рухлылар ғына еңә ала.*

*Н. Островский*

* * *

*Ниндәй ҙә булһа эште башҡарыу өсөн, тәүҙә был эштең хаҡлығына һәм кәрәклегенә ышанған булырға тейешһең.*

*Л. Толстой*

***

## *Китап һәм ғилем тураһында афоризмдар*



*Китаптар күңелде яҡтырта, кешене үҫтерә һәм нығыта, унда иң яҡшы теләктәрҙе уята, аңын зирәкләндерә, йөрәген һиҙгерләндерә.*

*У. Т еккерей*

* * *

*Китаптар хыялдарҙы уята, уларҙы тормошҡа ашырыуға юл күрһәтә, уйланырға мәжбүр итә, үҙеңә кәрәкте үҙаллы хәл итеү һәләте тәрбиәләй.*

*С. Г. Струмилин*

* * *

*Китапһыҙ булыу — аң ярлылығының юғары күрһәткесе. Үҙегеҙҙе ундай хәлгә төшөрмәгеҙ.*

*Д. Рескин*

* * *

*Китапһыҙ өй — йәнһеҙ кеше.*

*Цицерон*

* * *

*Күберәк уҡыған һайын, китаптар мине донъя менән нығыраҡ туғанлаштырҙы, йәшәү миңә тағы ла әһәмиәтлерәк була барҙы.*

*М. Горький*

* * *

*Китап уҡымаған ғаилә — рухи яҡтан зәғиф ғаилә.*

*П. А. Павленко*

* * *

*Әхлаҡи мәҙәниәткә эйә булған аңлы хеҙмәт кешеләре китапҡа оло ихтирам булған ғаиләләрҙә үҫә.*

*В. А. Сухомлинский*

* * *

*Ҡайҙа ҡояш яҡтыһы — шунда күләгә лә асыҡ күренә.*

*Гете*

* * *

*Тәртип булмайынса тыныслыныхлыҡ ышаныс та, өмөт тә, сәләмәтлекте һаҡларҙай һәләт тә, һәләкәттең юлын ҡыйыу ҙа юҡ.*

*Герцен*

* * *

*Хыялһыҙ кеше — ҡанатһыҙ ҡош.*

*М. Горький*

* * *

*Тик тороуҙа бәхет юҡ.*

*Ф. М. Достоевский*

* * *

*Хеҙмәте булмаған кеше алға бара алмай, бер урында ла тора алмай, ул артҡа китергә тейеш.*

*К. Ф. У шинский*

* * *

*Ялҡау кеше, әшәке хәшәрәттәр тыуҙырып, хәрәкәтһеҙ һаҫып ятҡан һаҙ һыуы кеүек, файҙалы бер нәмә лә бирмәй.*

*М. В. Ломоносов*

*Ялҡаулыҡ аңға ла, тәнгә лә тутыҡ ул.*

*Б. Франклин*

* * *

*Ял — эш төрөн алмаштырыу ул.*

*И. П. Павлов*

* * *

*Эшһеҙлек — ул ял түгел.*

*Ф. Купер*

* * *

## *Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт тураһында афоризмдар*



*Йәшлек хыялланмаһа, бөйөк идеяларҙың орлоғо йәшлек хыялдары йәйғоронда барлыҡҡа килмәһә, кеше тормошо бер нөктәлә ҡатып ҡалыр ине.*

*К. Д. Ушинский*

* * *

*Йәшлек — кешенең яҙ миҙгеле, унда ғүмер дауамындағы йылдар өсөн орлоҡ сәселә.*

*Я. Б. Княжнин*

* * *

*Кирелгән ҡанаттар менән йәшәргә кәрәк. Был рәссамдарға, шағирҙарға ғына түгел, бөтә йәш хеҙмәт кешеләренә лә ҡағыла.*

*С. Т. Коненков*

* * *

*Тыумыштан ҡанатлы булыу — иң ҡиммәтле байлыҡҡа булыу.*

*Аристофан*

* * *

*Дуҫтарҙы күреүҙән дә ҙур шатлыҡ юҡ, дуҫтарыңдан айырылыуҙан да ҙур ҡайғы юҡ.*

*Рудаки*

* * *

*Дуҫтарҙы ашыҡмай һайла, табылғандарын юғалтма.*

*Солон*

* * *

*Яңы дуҫтар тапҡанда, иҫкеләрен онотма.*

*Эразм Роттердамский*

* * *

*Бер-береңде ихтирам итеүҙән башҡа дуҫлыҡтың булыуы мөмкин түгел.*

*А.С. Макаренко*

***

*Әҙәпһеҙ дуҫтан да ҡурҡыныс нәмә юҡ.*

*Ж. Лафонтен*

* * *

*Аҡыл менән нығытылмаған дуҫлыҡты алйотлоҡ тиҙ емерә.*

*В. Шекспир*

* * *

*Дуҫлыҡ нигеҙе — ихтыярҙың, теләктәрҙең, ҡараштарҙың тура килеүендә.*

*Цицерон*

* * *

*Тиңлек бөткәндә, дуҫлыҡ та бөтә.*

*Д. Обер*

* * *

*Мин тәбиғәттәге, кешеләрҙәге, уларҙың ижадындағы матурлыҡты күрергә, улар менән һоҡланырға, улар аша үҙ-үҙемде камиллаштырырға шул тиклем теләйем, сөнки матурлыҡ менән мәрхәмәтлелек игеҙәк һеңлеләр. Үҙ өлөшөмә төшкән аскетизм — минең дошманым. Мин атай булырға, бәләкәсемдең күңеленә донъялағы бөтә яҡшылыҡты һеңдерергә, минең уға булған һөйөүем нурҙары аҫтында кеше күңеленең сәскәгә төрөнөүен күрергә теләйем.*

*Ф.Э.Дзержинский*

***

*Кеше тормошондағы иң һәйбәт нәмә — уның кешеләр менән булған дуҫлығы.*

*А. Линкольн*

* * *

*Дуҫлыҡ — йәшәү өсөн иң кәрәклеһе. Бер кем дә, башҡа бөтә байлыҡҡа эйә булғанда ла, дуҫтарһыҙ йәшәргә теләмәй.*

*Аристотель*

* * *

*Һәйбәт дуҫ — баһаһыҙ байлыҡ.*

*Кабус*

***

*Ысын дуҫлыҡ — үҙ-ара таяныстан тора: дуҫым минең теләктәремде хуплай, мин уныҡын хуплайым. Теләктәребеҙ төрлө булғанда ла, беҙ бергә алға барабыҙ.*

*И. Гете*

* * *

*Бер генә лә ысын дуҫы булмаған кешегә йәшәүҙең кәрәге юҡ.*

*Демокрит*

* * *

*Дуҫыңды үҙеңдең рухи идеалың күҙгөһө, үҙеңде тулыландырыусы итеп һаҡла.*

*Р. Эмерсон*

* * *

*Һинең һауығыуыңды байрам көткән кеүек көтөүселәр булғанда, ауырыуы ла рәхәт.*

*А. П. Ч е х о в*

* * *

*Мөхәббәт — бөтә һәйбәт нәмәләрҙе, бөйөклөктө, көслөлөктө, йылы хистәр һәм гүзәллекте тыуҙырыусы.*

*Ф. Э. Дзержинский*

* * *

*Мөхәббәт булдыҡлылыҡҡа, көрәшкә саҡыра.*

*Ф. Э. Дзержинский*

* * *

*Ысын мөхәббәт үлсәүҙе, сиктәрҙе белмәй.*

*Проперций*

* * *

*Саф мөхәббәт кешене сафландыра, ҡанатландыра, бөтөнләй үҙгәртә.*

*Н. Г. Чернышевский*

* * *

*Ысын дуҫлыҡ көнләшеүҙе белмәй.*

*Ф.Ларошфуко*

* * *

*Ышаныс-дуҫлыҡтың тәүге шарты.*

*Ж.Лабрюйер*

* * *

*Ышаныс юғалған урында дуҫлыҡ та юғала.*

*Сенека*

***

*Ысын дуҫ ҡына үҙ дуҫының йомшаҡлыҡтарын кисерә ала.*

*В. Шекспир*

* * *

*Кем бер ниндәй етешһеҙлекһеҙ дуҫ табырға теләй, ул бөтөнләй дуҫһыҙ ҡала.*

*Биас*

* * *

*Ысын дуҫ бәхетһеҙлектә һынала.*

*Эзоп*

* * *

*Дуҫлыҡ — иң тәүҙә ихласлыҡ, иптәшеңдең хаталарын күрһәтә белеү ул. Иптәше үҙ хатаһын төҙәтә алһын өсөн, тәүҙә дуҫтары аяуһыҙ тәнҡитләргә тейеш.*

*Н. А. Островский*

* * *

*Мөхәббәттә һәм дуҫлыҡта иң изгеһе— тиңлек.*

*И. А. Крылов*

* * *

*Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт — ике бөйөк нәмә, кешене бөтөнләй яңырта.*

*Ж а н Поль*

* * *

*Һөйгәнеңдән һөйөлөү — ниндәй ҙур бәхет.*

*А. П. Чехов*

* * *

*Мөхәббәттең сикһеҙ көсө һөйгәндәрҙе ҡаһарманлыҡҡа, көтөлмәгән сиктән тыш ҡурҡыныстарҙы еңел үткәрә белеүгә һәләтле итә.*

*Д. Бокаччо*

* * *

*Ерҙәге бөтә гүзәллек ҡатын-ҡыҙға булған мөхәббәттән барлыҡҡа килгән.*

*М. Горький*

* * *

*Күңелеңде тартҡан ҡыҙҙы ихтирам ит, уның сафлығын, намыҫын, кешелек ғорурлығын һаҡла. Һин яратҡан ҡыҙ — буласаҡ ҡатының, буласаҡ балаларыңдың әсәһе. Ул — һинең үлемһеҙлегең нигеҙе. Ул балаларыңда һине ҡабатлаясаҡ.*

*В А Сухомлинский*

* * *

*Иң яҡын кешеңде бары уның менән айырылышҡанда ғына ныҡлы аңларға мөмкин.*

*И. Тургенев*



* * *

*Ысын мөхәббәт килмәһә, тормоштоң асылын аңлап булмай.*

*М. Горький*

* * *

*Мөхәббәт кешелә ҡаһарманлыҡ яһау һәләтен уята.*

*М. Горький*

* * *

*Мөхәббәт яуаплылыҡ өҫтәй. Унһыҙ тормош юҡ.*

*И. Гончаров*

* * *

*Ғашиҡтар һәр ваҡыт талантлы һәм сағыу булалар.*

*М. Горький*

* * *

*Мөхәббәт — матурлыҡ сығанағы.*

*М. Горький*

* * *

*Күп күргән һайын күберәк яратаһың.*

*М. Горький*

* * *

*... Ҡайҙа мөхәббәт бар, унда ышаныс та булырға тейеш.*

*Ф. Дзержинский*

* * *

*Көнләшеү — һөйгән кешеңдең иркен сикләргә тырышыу ул.*

*Н. Островский*

* * *

*Кеше — ер тәбиғәтенең иң бөйөк емеше. Әммә кеше шул тәбиғәттең хазиналары менән кинәнһен өсөн сәләмәт, көслө, аҡыллы булырға тейеш.*

*И. П. Павлов*

* * *

*Беҙҙең бәхеттең ундан туғыҙ өлөшө сәләмәтлеккә бәйле.*

*Л. Шопенгауер*

* * *

*Бәхет — иң тәүҙә сәләмәтлектән башлана.*

*Г. Куртис*

* * *

*Хәрәкәттә — йәшәү. Хәрәкәтсәнлектең кәмеүе — йәшәү процесының һүлпәнәйеүе ул.*

*В. В. Гориневский*

* * *

*Йәйәү йөрөү һәм хәрәкәт мейенең йылдамлығына, фекерҙең эшсәнлегенә булышлыҡ итә.*

*Ж.-Ж. Руссо*

* * *

*Кешеләге матурлыҡты һәм гүзәллекте уның организмының гармоник үҫешенән, сәләмәтлегенән башҡа күҙ алдына килтереп булмай.*

*Н. Г. Чернышевский*

* * *

***Мәҙәниәт тураһында афоризмдар***

*Китап кеше хаҡында кешелә күрмәгәндәреңде һәм уның хаҡында белмәгәндәреңде иҫбатлау һәләтенә эйә.*

*М. Горький*

* * *

*Китаптар төбөнән ҡиммәтле гәрәбәләр алып сыға торған диңгеҙ тәрәнлегенә оҡшаш.*

*Н. М. Карамзин*

* * *

*Ниндәй китаптар укыганлыгыңды әйтһәң, мин һинең кемлегеңде әйтермен.*

*Н.М. Карамзин*

* * *

*Якшы китаптарҙы укыу —үткән дәүерҙәрҙәге иң һәйбәт кешеләр менән кәңәшләшеү менән бер. Улар һиңә үҙҙәренең иң һәйбәт уй-кисерештәрен еткерәләр.*

*Рехарт*

* * *

*Донъяла намыҫлы кешенән дә матурыраҡ бер нәмә лә юҡ.*

*Р. Роллан*

* * *

*Ф. Шиллер*

*Иң ҙур суд — намыҫ суды.*

*В. Гюго*

***

*Саф намыҫ — иң мөһим матурлыҡ.*

*Цицерон*

* * *

*Тоғро намыҫ — кешеләр тормошоноң етәксеһе.*

*Л. Н. Толстой*

* * *

*Ысын намыҫлылыҡ — теләһә ниндәй шарттарҙа ла күпселек кешеләргә якшылыҡ эшләргә ҡарар итеү.*

*Б. Франклин*

* * *

*Ояла белеү сифаты кеше үҙенсәлектәренең иң мөһиме һәм иң кешелеклеһе.*

*Ч. Дарвин*

* * *

*Ғүмер буйы бәхетле булырға теләһәң, намыҫлы бул.*

*Т. Фуллер*

* * *

*Тупаҫлыҡ — рухи көсһөҙлөк.*

*М. Эбнер - Эшенбах*

* * *

*Яһиллыҡ  күңел ярлылығынан, көсһөҙлөктән килә.*

*Сенека*

* * *

*Уҫаллыҡ — ваҡ йәнлелек ул.*

*А. П. Чехов*

* * *

*Үс алыу — ваҡ һәм түбән йәнленең ләззәтләнеүе.*

*Ювенал*

* * *

*Асыу — яһиллыҡ сығанағы.*

*Чарль де Костер*

* * *

*Ҡомһоҙлоҡ — бөтә яуызлыҡтың тамыры.*

*Д. Чосер*

***

*Ҡурҡаҡлыҡ — ҡанһыҙлыҡтың әсәһе.*

*М. Монтень*

***

*Тәкәбберлек етерлек уйланмауҙарҙан, үҙ-үҙеңде йүнле белмәүҙән килә.*

*Д. Адиссон*

* * *

*Эскеселек — ирекле рәүештә аҡылдан яҙыу.*

*Сенека*

** *

*Вино эскәндә, кешеләр тупаҫлана, миңрәүләнә һәм яуызлана бара.*

*Л. Н. Толстой*

* **

*Үҙеңдең көнкүрешең тураһында ғына уйлау — хайуан булыу ул.*

*В. А. Сухомлинский*

* * *

*Ябайлыҡ — әхлаҡи матурлыҡтың төп шарты.*

*Л. Н. Толстой*

* * *

*Иғтибарлылыҡтың бәләкәй генә дозаһы ла тормошто йәмләндерә, ҙуры инде уны бигерәк тә биҙәй.*

*К. Боуби*

* * *

*Иғтибарлылыҡ иғтибар тыуҙыра.*

*Эразм Роттердамский*

* * *

*Ата-әсәгә булған һөйөү һәм ихтирам — иң изге тойғо.*

*В. Г. Белинский*

* * *

*Ата-әсәгә булған һөйөү — мәрхәмәтлелектең нигеҙе.*

*Цицерон*

* * *

*Атаһы яулаған уңыштар улыныҡы булмай.*

*М. Сервантес*

* * *

*Аңығыҙ дөрөҫ эшләһен өсөн, үҙ тәнегеҙҙе тәрбиәләгеҙ.*

*Р.Декарт*

* * *

*Әхлаҡи сәләмәт булыу өсөн, үҙеңде физик эш менән һелккеләп торорға кәрәк.*

*Л. Н. Толстой*

* * *

*Рухи ныҡлығыңды һаҡлау өсөн, тән ныҡлығын һакларға кәрәк.*

*В. Гюго*

***

*Спорт оптимизм мәҙәниәтен, дәртлелек мәҙәниәтен формалаштыра.*

*А.В. Луначарский*

* * *

*Гимнастика — кешенең йәшлеген оҙайта.*

*Д. Локк*

***

*Иң һәйбәт дарыуҙар: саф һауа, һалҡын һыу, бысҡы һәм балта.*

*В. Д. Поленов*

* * *

*Ихласлыҡҡа ирешеү ауыр ҙа, нескә лә, ул аҡыллылыҡ һәм ҙур рухи тотанаҡлылыҡ талап итә.*

*В.В. Вересаев*

* * *

*Йомшаҡ характерлы кешеләр ихлас була  алмайҙар.*

*Д. Ларошфуко*

* * *

*Көнсөллөк байрагы аҫтында күрә алмаусанлыҡ, һатлыҡ йәнлелек һәм интригалар тантана итә.*

*К. Гельбиций*

* * *

*Намыҫлы кеше бер кемдән дә көнләшмәй.*

*М. Горький*

* * *

*Көнләшеүселәр ни өсөн һәр саҡ кәйефһеҙ була, сөнки уларга үҙҙәренең уңышһыҙлығы гына түгел, башкаларҙың уңышы ла тынгы бирмәй.*

*Абдуль Фарадж.*

***

*Һөйөү телескоп аша, көнсөллөк микроскоп аша ҡарай.*

*Б. Шоу*

***

*Көнсөллөк бәхетлеләрҙең дошманы.*

*Эпиктет*

* * *

*Ялғанлыҡ һәм аҫтыртынлыҡ — наҙандар һәм ҡурҡаҡтар ышығы.*

*Ф. Честерфилд*

* * *

*Алдашыу йәнгә һәм тәнгә бөтмәҫ ғазаптар килтерә.*

*Ш. Руставели*

* * *

*Кем алдаша — уның кеше булырға хаҡы юҡ.*

*Фенелон*

